# Сәләм һеҙгә, көрҙәштәр!

›үгим АРАЛБАЙ

# Сәләм һеҙгә, ҡәрҙәштәр!



*Күренекле башҡорт шағиры Ҡәҙим Аралбай (Аралбаев Ҡәҙим Әбделғәлим улы) 1941 йылдың 1 сентябрендә Башҡортостандың Хәйбулла районының Таңатар ауылында тыуған.*

*Хеҙмәт юлын 1959 йылда тыуған колхозында башлай. Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый һәм ауыл мәктәптәрендә биш йыл буйы уҡытыусы һәм директор урынбаҫары булып эшләй. 1971—73 йылдарҙа — СССР Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспиранты. 1973—77 йылдарҙа "Ағиҙел" журналында әҙәби хеҙмәткәр, бүлек мөдире, яуаплы сәркәтип булып эшләй. 1981 йылдға тиклем Башҡортостан Яҙыусылар союзы идаралығының сәркәтибе була, 1988 йылда идаралыҡтың рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. 1993 йылдан Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә хеҙмәт итә — тәүҙә баш мөхәррир, 1996 йылдан директор.*

*Ҡәҙим Аралбай егерменән артыҡ шиғыр һәм поэма, проза һәм башҡорт фольклоры буйынса фәнни эҙләнеүҙәр китаптары авторы.*

*Ҡәҙим Аралбай Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, уның ижады Сергей Чекмарев исемендәге (1983) һәм Зәйнәб Биишева исемендәге (2000) әҙәби премиялар менән билдәләнгән, 1996 йылда шағир республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды.*

## Башҡортостандан сәләм

Һаумыһығыҙ, ғәзиз дуҫтар!
Яҙмышташтар, серҙәштәр,
Һеҙгә бөгөн Башҡортостан
Бар йөрәктән өндәшә:
Сәләм һеҙгә, ҡәрҙәштәр!

Ғәзиз төйәк — тауҙар тауы,
Ил һаҡлаған ҡоралым,
Сәләм әйтеп оҙатып ҡалды
Сал тарихлы Уралым —
Ай, Уралым, Уралым!..
Ағиҙелем, Ҡариҙелем,
Һылыу Димем, Һаҡмарым,
Тулҡынланып, ҡумыҙ сиртеп,
Әйтте сәләм-таҡмағын.

Был сәләмгә һыйған булыр:
Далалар иркенлеге,
Күлдәренең тәрәнлеге,
Урмандар күркәмлеге,
Донъялар именлеге!

Беҙҙең дуҫлыҡ юлдарында
Талпына изге әләм.
Салауат батыр ейәндәре
Тапшыра ҡайнар сәләм! —
Башҡорт халҡынан сәләм!!!



08-2001.p65 91 21.08.01, 11:24
Black

### *Палдискизағы Салауат һәйкәленә*

Балтик яры. Һалҡын Палдискиҙа
Тағы яңғыҙ ҡалды Салауат.
«Эй, туғандар! Ҡайтаһығыҙҙамы?» —
Яңғыраны арттан шул ауаз.

Диңгеҙ яры.
Батыр яңғыҙ-ярым
Тороп ҡалды сит-ят ҡалала.
Диңгеҙ ярһый, көсөн күрһәтергә,
Гүйә, бурҙай беҙгә абалай…

Моңаймасы, батыр, тик бер үҙең
Ят яҡтарҙа тороп ҡалғанға.
Батырҙарҙы ил тыуҙыра, әммә
Батыр берәү була арала.

Атың ятмай тарих туҙанында,
Заман ыҙанында — урының.
Һин күтәрҙең — илде,
Илең һине
Төп тамғаһы итте гербының.

Бығауыңдан тамған ҡайнар ҡаның
Йыуған сирек быуат ҡаҡ ташты.
Тыуған ереӊ төҫө — ҡара тупраҡ
Балтик ҡомо менән ҡатышты.

Тере тупраҡ — йәдкәр Уралыңдан,
Был майҙансыҡ — һинең биләмәң.
Йәш яугирҙай баҫҡан күк
шыршылар
Һуңғы төйәгеңде биҙәгән.

Һин бында бул,
Батыр,
Моңаймасы,
Тик бер үҙең тороп ҡалғанға.
Һин бит яңғыҙ түгел —
Халҡың рухы
Һинең рухың менән ялғанған.

### *Рогервик*

Рогервик — ҡомло ер, шомло ер,
Балтика биләүгә билгән.
Сал даръя — мәңгелек тирмәнсе
Таш тартып, таштан он иләгән.

Уралда ихтилал күкрәүе
Рәсәйҙе һелкеткәс йәшендәй,
Батшалыҡ уй ҡорған:
Салауат
Еңә алмаҫ диңгеҙҙәр дәһшәтен.

Диңгеҙҙең дәһшәте батырҙың
Ярһыуын оторо ҡайнатҡан,
Уралдан — иленән айырылыу
Хыялый хистәрҙән айнытҡан.

Ғүмеренең һәр көнөн таш менән
Диңгеҙгә аяуһыҙ атҡанда,
Ҡабарған офоҡҡа текәлеп,
Салауат уйҙарға батҡандыр.

Батҡандыр,
Тик ҡабат ҡалҡҡанда
Диңгеҙҙең ишетеп шауҙарын,
Тулҡындар яуында күргән ул
Халҡының өр-яңы дауҙарын.

Рогервик — тотҡондар иңрәһә,
Гәлсәрҙәй күҙ йәшен түгер ер,
Батырҙың һағышын тойғандай,
Салауат баҫҡанда сүгер ер.

Рогервик, һин шаһит:
Батырҙың
Күҙенә баҡҡанһың түбәндән,
Ул һиңә мөлдөрәп ҡараған,
Мәрхәмәт, ярлыҡау көткәндәй.

Ташында табанын ҡанатып,
Һине ул көн һайын иңләгән,
Көн һайын Уралын һағынып,
Күңеле һыҙылып иңрәгән.

Батырша, Салауат, Буранбай…
Һөрөлмәй ҡалғандай һөргәнгә,
Уларҙың рухтары иректә,
Тәндәре китһә лә гүр-ергә.

Әллә беҙ тотҡондар бөгөн дә? —
Көнөбөҙ, телебеҙ һөргөндә,
Боронғо ҡаныбыҙ, данебыҙ,
Рухыбыҙ, ҡотобоҙ бөлгөндә?..

Салауат быуатҡа бер тыуа,
Батырҙар хәтерҙән юйылмаҫ.
Башҡортҡа Рогервик бихисап,
Тик халҡым ирекҡә туйынмаҫ…

### *Акмулла*

(ҡобайыр)

Ай Аҡмулла, Аҡмулла,
Хаслыҡ күргән хаҡ мулла.
Яйыҡ буйла, Дим буйла,
Халҡың яҙмышын уйла.
Элеп ал да һелкеп һал,
Ярлы үсен байҙан ал.
Һиндәй иргә майҙан тар.
Бәйгеләрҙә ал булдың,
Күңелдәргә ял булдың,
Даулы ерҙә дан булдың,
Һанлы ерҙә һан булдың.



08-2001.p65 92 21.08.01, 11:24
Black

Изгелеккә бағынғас,
Тоғролоҡҡа табынғас,
Асыл эсле әҙәмгә
Бысраҡ, ғәйбәт ягылмаҫ,
Вайымһыҙлыҡты һиҙеп,
Тора илдән ҡот биҙеп,
Дөрләт тағы ут-ҡуҙың,
Кәрәк һинең хаҡ һүҙең...

Ай Аҡмулла, Аҡмулла,
Миәс буйла, Сөн буйла,
Аҡ көндәргә өмөтләнгән
Халҡың яҙмышын уйла!..
Халҡың яҙмышын уйла!..

### *Әхмәтзәки Вәлиди Туғанға*

Йырлайҙарҙыр, ахыры, һине иҫләп:
«... Урал тауын буйлап, көн битләп;
Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...»

Ҡайттың бына тыуған илкәйеңә...
Шул уҡ һыуың, шул уҡ күгеңме?
Урмандарың,
Урал тауың шулмы?
Башҡорт халҡың — шул уҡ түгелме?

Ҡайттың илгә.
Һағынып, зарығып ҡайттың.
Ҡайтыуҙың да була төрлөһө.
Бәйгеләрҙән, яуҙан ҡайтҡанда ла
Ат яҡшыһы аумаҫ һөрлөгөп...

Һинең ҡайтыу
Күпме ҡоҙғондарҙы
Ағас баштарынан ҡуҙғатыр!

Бөлгән,
Яҙмышына күнгән башҡортоңдо
Йоҡоһонан, бәлки, уятыр.

Асыҡланыҡ һуңлап:
Дуҫлыҡтарҙың
Тиң булғанда ғына йәшәрен,
Халыҡ-ара туғанлыҡтың да
Саф
Миллилекһеҙ бер саҡ сәсәрен!

Халҡың өсөн йәнең фиҙа ҡылған,
Ғүмереңаямаған ҡаһарман,
Үҙ ереңдә ирек менән бергә
Хөкөм көттө бер үк ҡатарҙан...

Ватып сиктәр, биктәр, тыйыуҙарҙы
Ҡайттың Тыуған илгә әйләнеп,
Күпме дәүер көттөк
Йәшәүҙәрҙе
Йөрәктәргә йөрәк бәйләнеп!

Юҡ, һин генә түгел —
Ҡайтҡан, Туған,
Беҙ ҙә һиңә ҡайттыҡ, Вәлиди! —
Ҡайттыҡ шундай көнгә:
Һәр ҡарашты,
Һәр ҡарышты,
Өр-яңынан ҡарап хәл итер!..

Көтөлмәгән серле кометалай,
Кешелектең зиһен-аңына
Ярып килеп индең,
Үлемһеҙ йән, —
Йөҙ йәшеңдә тыуҙың яңынан.

Ысын ирек, ысын яңырыуға,
Рухи азатлыҡҡа мәл етте!
Ҡайтыуҙарың менән, Оло Туған
Ҡайтыуҙарың менән, Вәлиди!

### *Иҫәнбикә менән Субидәй Туғандарға*

Атай йортон эҙләп ҡайтҡан
Иҫәнбикә вә Субидәй.
Йән тартмаһа, ҡан тарта, ти,
Туғанлыҡ ул — шул бит әй.

Баҡый тауҙың* йыуаһы
Әсе икән ҡапҡанда,
Ҡыуаныс та, аяныс та
Һеҙ, туғандар, ҡайтҡанда.
Туған халҡын эҙләп ҡайтҡан
Иҫәнбикә вә Субидәй.
Йән дә тарта, ҡан да тарта,
Атайсал ул — шул бит әй.
Тел дә тарта, моң да тарта,
Туған халҡың — шул бит әй.
Ут та тарта, һыу ҙа тарта,
Тыуған ер ул — шул бит әй...



*Баҡый тауы — Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуған ауылы Көҙәндең ҡаршыһындағы тау.



08-2001.p65 93 21.08.01, 11:24
Black